

*Рауил БИКБАЕВ,*
*Башҡортостандың халыҡ шағиры,*
*БР Яҙыусылар союзы рәйесе*

# Ватаным тип йәшәй «Ватандаш»

Ун биш йыл ғүмерҙе матбуғаттағы баҫма өсөн, бәлки, бик ҙур юл тип әйтеп тә булмайҙыр. Ләкин ошо арала «Ватандаш» журналы халҡыбыҙ араһында ғәйәт ҙур абруй яуланы.

Уның баш мөхәррире итеп академик Ғайса Хөсәйенов тәғәйенләнгәс, ҡайһы берәүҙәр һағайыбыраҡ та ҡуйҙылар. Оло ғалим һәм әҙиптең хеҙмәттәре милләтебеҙҙең рухи тормошонда күренекле ваҡиғаға әйләнһә лә, уның матбуғатта быға тиклем бөтөнләй эшләмәүе шундай аптырауҙарға сәбәп булғандыр. Ләкин Ғайса Батыргәрәй улы яңы журналдың тәүге һандарынан уҡ үҙен оҫта ойоштороусы, зирәк мөхәррир итеп танытты, һәләтле авторҙарҙы йыйҙы. Ул баҫмаға баштан уҡ энциклопедик йүнәлеш бирҙе, уны тәрән йөкмәткеле, бай мәғлүмәтле итеүгә, аҡыллы ла, ҡыҙыҡлы ла, уҡымлы ла булыуына өлгәште.

Ун биш йыл буйына журнал бына ошо матур традицияларҙы дауам итә. Уның ун биш йылда сыҡҡан һандарын бергә йыйһаң, ғәжәйеп хазина — тотош китапхана туплана. «Ватандаш» һәр саҡ уҡыусыларҙы халҡыбыҙҙың үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге тураһында уйландыра, өр-яңы асыш-табыштар менән ҡыуандыра, милләтебеҙ, дәүләтебеҙ өсөн бик кәрәкле мәсьәләләрҙе күтәрә. Журнал ватандаштарыбыҙҙы бергә туплай, әйҙәй, рухландыра. Яҙмышыбыҙҙы хәстәрләп, илем, телем, Ватаным тип йәшәй «Ватандаш».

Махсус әҙәби журнал булмаһа ла, «Ватандаш»тың әҙәби әҫәрҙәргә, тәнҡит мәсьәләләренә ҙур урын биреүе беҙҙең әҙиптәр өсөн айырыуса ҡыуаныслы.

Киләсәктә лә, бөгөнгө һымаҡ, уның әйткән һүҙе үткер, фекере тәрән, ҡарашы киң булһын. Тормошобоҙҙоң йылъяҙмаһын ижад итеүҙә яңы уңыштар яулаһын.